

*Морат ТӨХВӘТУЛЛИН,*
*философия фәндәре кандидаты, БДУ доценты*

# РУХИЛЫҠ ҺӘМ ДИН

## *Улар араһындағы тарихи бәйләнешкә карата*

Милләт, унның рухи донъяһы, үҙенсәлектәре һәм асылы — был мәсьәләләргә иғтибар көндән-көн арта бара. Уларға бәйле тәбиғи һорау тыуа: «Ә бына ислам дине башҡорт рухына ниндәйерәк тәьҫир яһаған һуң?» Сетерекле һорау. Шулай ҙа яңыраҡ ғилми телмәр тотҡан бер автор тап ошо һорауға һис бер ниндәй ҙә шикләнеүикеләнеүһеҙ генә яуап ҡайтарҙы. «Монотеизм осорондағы авторитаризм халыҡтың рухи үҫешен тотҡарлай, ә мәжүсилек осоронда иһә башҡорттарға үҙ рухын асыу, рухи үҫеш өсөн шарттар — мөхит ҡулайлыраҡ, иркенерәк булған», — тине ул ҡыйыу ғына.

Дин мәсьәләһенә бәйле берсә ҡыҙып, берсә әкренәйеп киткән фекер алышыуҙар, төрлө бәхәстәр донъя тарихында, билдәле булыуынса, ике мең йылдан ашыу дауам итә инде. Кешелек үҙ асылын һаҡлап ҡала алған осраҡта, мәсьәләгә төшөнөү маҡсатын тотҡан бындай һөйләшеү, әңгәмәләр киләсәктә лә, моғайын, дауам итер. Был — тәбиғи һығымта, сөнки дин үҙенең тормошсанлығын, йәшәргә һәләтле икәнлеген бөгөнгә ярайһы уҡ иҫбатланы. Шуға күрә кешелектең киләсәге, рухи донъяһының үҫеше лә күпмелер кимәлдә дингә ҡараш, мөнәсәбәт менән бәйле буласаҡ, тип әйтергә нигеҙ бар. Мәсьәләнең әһәмиәтле булыуы тарихтан да төҫмөрләнә: бер генә аҡыл эйәһе лә битарафлыҡ күрһәтеп, уны ситләп кенә үтеп китә алмаған.

Юғарыла телгә алынған авторҙың яуабынан күптәр, бәлки, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо ла кисергәндер. Беҙҙә иһә ул ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Ни өсөн — мәҡәләбеҙҙә һүҙ ошо хаҡта.

Тәүҙә авторҙың, имеш, рухи үҫеш мәнфәғәттәре өсөн мәжүсилек уға алмашҡа килгән монотеизмға ҡарағанда ҡулайлыраҡ, отошлораҡ, тигән фекеренә туҡталайыҡ.

Эйе, күп кенә халыҡтар мәжүсилек осоронда бөгөнгө мәҙәниәтле донъяны һоҡландырыусы сәнғәт ҡомартҡылары, рухи нескәлек менән биҙәлгән төрлө-төрлө әҫәрҙәр ижад иткән. Улар араһынан бер-нисәһен генә иҫкә төшөрөү ҙә быға асыҡ дәлил булып тора. Бына, мәҫәлән, ҡырғыҙ халҡының «Манас», башҡорттарҙың «Урал батыр», гректарҙың «Илиада» һәм «Одиссея» эпостарын, мысырлыларҙың мөһабәт пирамидаларын һәм шулай уҡ башҡа халыҡтарҙың да байтаҡ өлгөләрен атарға була.

Шулай итеп, бөгөнгө донъялағы һәр халыҡ тиерлек мәжүсилек осоронда үҙ рухын ярайһы уҡ асыҡ, аныҡ сағылдырыусы — һүрәтләүсе тарихи ҡамартҡылар ижад итеп ҡалдырған. Улар менән танышып, һәр яңы быуын һоҡлана, ғорурлана, уйлана. Тимәк, был боронғо осор, ысынлап та, ололауға, ихтирамға лайыҡ. Әммә тарих был «уңдырышлы, бәрәкәтле» осорҙағы бөтә халыҡтарҙы ла үҙ «арбаһы»на ултырып, алға алып киткән.



05-2001.p65 188 30.07.01, 9:59

Тарих юлында арынып та, ҡайһы ваҡыт абынып та алға атлаған халыҡтар бер мәл мәжүсилектән арына башлаған. Күпмелер ваҡыт үтеүгә улар донъя диндәре — буддизм, ислам, христиан — араһынан берәүһен ҡабул иткән. Билдәле булыуынса, гректар — монотеистик христиан динен, ҡырғыҙҙар һәм башҡорттар ислам динен ҡабул иткән, урыҫтар күсләп христиан диненең православие тармағын ҡабул итергә мәжбүр була...

Урынлы «дәғүә» тыуа: мәжүсилек дәүеренә алмашҡа килгән «дини осор» шундай уҡ ихтирам, ололауға хоҡуҡлы түгелме ни һуң? Һорауға ыңғай йә кире яуап биргән ике осраҡта ла «Ни өсөн?» тигән яңы һорау тыуа. Уны дәлилләүе иһә ауыр мәсьәлә. Ике осорҙо еңел-елпе генә сығыштырған булып, уларҙың береһенә «өҫтөнлөк» бирергә маташыу — был логиканың ижтимағи тормош өсөн бигерәк тә әһәмиәтле «етерлек нигеҙләү» тип аталған законына ҡаршы килә. Ике осор ҙа кешелек тарихында әһәмиәтле урын алып тора, икеһененең дә үҙҙәренә генә хас үҙенселектәре бар. Шуға күрә уларҙы сағыштырғанда ҡапма-ҡаршы ҡуйырға маташыу өсөн объектив, фәнни нигеҙ юҡ.

Урыҫ мәҙәниәтендә «серебряный век» тип аталған осорҙа ижад ителгән әҫәрҙәрҙең күбеһе бөгөн донъя мәҙәниәтенең «алтын фонды»на индерелгән. Уларҙың байтағы тулыһынса христиан дине мотивтарына ҡоролған, дини мәсьәләләргә бәйләнгән, дини нигеҙҙә ижад ителгән. Мәҫәлән, фольклор аша килгән төрлө йолалар, опералар, иконалар, архитектура ҡомартҡылары тип таналған сиркәүҙәр, айырым ваҡ әҫәрҙәр һәм романдар (мәҫәлән, Ф.М.Достоевский әҫәрҙәренең бер нисәһе). Тимәк, монотеистик рухлы христиан дине урыҫтарҙың үҙ рухын асыуға, сағылдырыуға һәм үҫтереүгә һис тә генә ҡамасауламаған. Хатта киреһенсә: тап ошо монотеистик тәғлимәт нигеҙендә урыҫ халҡы берләшеүгә өлгәшә алған. Тап ошо һуңғы нигеҙҙә халыҡ алға йылдамыраҡ бара башлаған. Шуға күрә был тәғлимәтте урыҫ халҡы рухы үҫеше өсөн этәргес көс булған, тип әйтергә нигеҙ бар.

Ислам диненең башҡорт рухына тәьҫире тураһында ла ошондай уҡ ыңғай баһа тарихи дөрөҫлөккә яҡын килә, беҙҙеңсә. Мосолманлыҡ башҡорт аңына көсләп индерелмәгән — был тарихи хәҡиҡәт. Ислам дине иреклe рәүештә ҡабул ителгән икән, тимәк, был тәғлимәт күпмелер кимәлдә һәм күләмдә, аҙмы-күпме дәрәжәлә башҡорттоң рухи донъяһына, уның күп һанлы ынтылыштарына, ижтимағи һәм шәхси аң мәнфәғәттәренә, үҫеш ихтыяждарына (ул осор өсөн) ҡәнәғәтләнерлек яуап биргән. Тап ошо турала «һуғышсан атеизм»ға нигеҙ һалыусыларҙың ифрат та тәрән мәғәнәле фекере бар: «Идея» мәнфәғәттәрҙән айырылған осраҡта шунда уҡ үҙен мәсхәрәгә төшөрә»[1].

Тимәк, ислам тәғлимәте милләт рухына һис тә генә ҡаршы килмәгән.

Ул дәүерҙә башҡорт рухының икенсе юлға төшөп үҫешеү мөмкинлеге ихтималлығын да иҫәпкә алырға кәрәк. Халыҡ ислам динен ҡабул итмәгән булһа, ул икенсе дингә ылығыр ине. Бында көнбайыштан таралып килгән христиан динен күҙ уңында тоторға кәрәк. Ошоға ла иғтибар итәйек: IX быуатта Рәсәй славяндары, нигеҙҙә, урыҫ халҡы, ислам динен ҡабул итеү мөмкинлеге тураһында ла уйлаштырған. Был турала бөгөн кире ҡаҡҡыһыҙ мәғлүмәттәр бар[2]. Урыҫ кенәздәренә ислам дине оҡшап етмәгән. Әммә был хәл ике монотеистик диндең ҡайһыһылыр өҫтөнөрәк, камилыраҡ тигәнде аңлатмай — былдай һығымта өсөн фәнни нигеҙ юҡ.

Диндәрҙең тарихтағы урыны, әһәмиәте, бөгөнгө абруйы һәм киләсәге тураһында оҙон фәлсәфә ҡорорға мөмкин. Әлбиттә, һәр кеше уларҙың барыһы менән дә килешә алмай. Шулай ҙа бөгөнгө фәндә бер һығымта бәхәс тыуҙырмай — ул дини тәғлимәттәрҙең ижтимағи-сәйәси мөхиткә тәьҫирен баһалауға бәйләнгән. Тәбиғи-тарихи рәүештә барлыҡҡа килгән һәм тарҡау, сибек кенә булып үҫешкән төрлө әхлаҡи ҡиммәттәрҙе дин бергә йыйып туплаған һәм уларҙы тәртипкә килтереп, бер системаға һалған. Һуңынан аңлайышлы формаларҙа халыҡтарға кире ҡайтарылған ул кәңәш, өгөт-нәсихәт, ҡағиҙәләр. Кешелектең ихтыяр-мәнфәғәттәренә был алымдар ҡаршы килгән булһа, дини тәғлимәт йәшәргә һәләтле булыр инеме ни? Әлбиттә, юҡ.



05-2001.p65 189 30.07.01, 9:59

Бөгөн дин белгестәренең хеҙмәттәре, дини телдәге әхлаҡи ғилем, изге китаптар, дини нигеҙҙә ижад ителгән төрлө өлкәләрҙәге ҡомартҡы-хазиналарҙың барыһы ла дөйөм кешелек мәҙәниәтенең әһәмиәтле өлөшө булып иҫәпләнә. Был баһа-хәҡиҡәтте милләт ғилемлеләренә лә танырға ваҡыт. «Кешелек донъяһындағы мәсьәләләрҙә дин һәм дини философия үҙ телендә сағылдырған. Тик әхлаҡи һәм интеллектуаль һуҡырлыҡ ҡына быны аңларға ҡамасаулай!», — тине ошоға бәйле билдәле философ В.Н.Шердаков.[3]

Ислам диненә тартылғанға тиклем башҡорт рухы, аңы нигеҙҙә «үҙ ҡаҙанында» ҡайнаған, шуға күрә сикләнгәнерәк күләмдә фәлсәфә ҡорған, донъяға ҡараш туплаған, ижад иткән. Ислам тәғлимәте иһә милли рух, аң, ынтылыштарға анығыраҡ йүнәлеш биргән, ҡайһыларын, бәлки, сикләгәндер ҙә. Мифологик һәм мәжүси аң өсөн инде, билдәле, бер ниндәй ҙә сик юҡ — шуға күрә лә был дәүерҙә донъяға килгән ижади әҫәрҙәр беҙҙе геройҙарҙың эскерһеҙлеге, төрлө мөғжизәле һәләттәргә бай булыуы, изгелеккә ышаныс тыуҙыра алыуы менән арбай, һоҡландыра, яҡтылыҡҡа өндәй. Әммә ысынбарлыҡ бынан күпкә ҡатмарлыраҡ бит!

Башҡорт рухына ислам дине олпатлыҡ өҫтәгән, уның түҙемлелеген-сабырлығын ныҡытҡан, хис-тойғоларға аҡыл-зиһен ҡеүәһен дә өҫтәп йәшәү кәрәклеген аңлатҡан, шәхестең ғилемгә ынтылыштарына терәк биргән. Кешене әҙәплелеккә күндерергә ынтылып, үҙ-үҙенә тәнҡит күҙлегенән ҡарай белергә өндәп килә. Күп йәһәттән ислам тәғлимәте башҡорттоң үҙаңын күтәреүҙә лә этәргес көс булып торған.

Ислам диненең шәхси рухи донъяға үҙенсәлекле тәьҫире тураһында тағы ла бер-нисә миҫал килтерәйек.

Күренекле француз философы, интеллектуал-коммунист, тыумыштан христиан Роже Гароди (1913 йылда тыуған) рухи үҫеше юлында ислам динен ҡабул иткән. Уның «Ислам — наше будущее», «Щедрость ислама», «Мечети — зеркало ислама» тип аталған китаптары мәсьәләгә төшөнөүгә тос өлөш индерә.

Артабан бөтә донъяға билдәле Жак Ив Кусто исемен атарға була. Был француз кешелек тарихында үҙенең мөғжизәләргә бай тәбиғәтте өйрәнеү-тикшереүҙәре менән генә түгел, шулай уҡ ысынбарлыҡҡа бойондороҡһоҙ ҡарашлы шәхес булараҡ та юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы. Бөтә донъяны гиҙеп үткән шәхес йәше олоғайға төшөүгә ислам динен ҡабул итә.

Бындай шәхестәр исемлеген артабан дауам итергә була. Улар араһында милләте буйынса немец, киң билдәле ғалим Әхмәд Шмид, үҙ ваҡытында донъя йәштәренең кумиры булған музыкант һәм йырсы Майкл Джексон, атаҡлы боксер Мөхәммәт Али, заты-сығышы менән урыҫ кенәздәренә барып тоташҡан американы күренекле ғалим Кирилл Гляссе һәм башҡалар.[4]

Ошо миҫалдарҙан әҙмә-эҙ һығымта тыуа. Ислам тәғлимәтенең талап-ҡанундары кешеләрҙең шәхси бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылыштарын һүндермәгән, ижади тормошҡа тартылған рухтың ҡанатын һындырмаған. Тимәк, монотеистик ислам динен авторитаризмда ғәйепләгән автор ҡарашы етерлек нигеҙләнмәгән.

Ислам дине башҡорт рухына хас ярһыулыҡты кәметеүгә лә үҙ өлөшөн индергән. Кешегә әҙәп талап иткән ҡанундарға төшөнөп, үҙ ҡылыҡтарын тәртипкә һалырға күндереү маҡсатында өгөт-нәсихәт биреп килә ул. Башҡорттоң «баш бирмәҫ», «арҡырылашыуға» тартым рухын бер-ни тиклем үҙ мөхитендә әүәләгән һәм уға дөйөм кешелек өлгөләренә яҡын килгән яңы форма бирергә ынтылған. Ошо нигеҙҙә милли рух үҙенең ҡайһы ваҡыт маҡсатһыҙмәғәнәһеҙ булып күренгән ҡыҙыулығын кәметкән һәм яуаплылыҡ, киңерәк ҡараш талап иткән баҫҡысҡа күтәрелгән.

Әммә башҡорт үҙ ерендә ислам тәғлимәтенән көс-ҡеүәт менән илһам алып, уның сафландырыуы, именлек-тыныслыҡ таратыуы мөхитендә иркенләп кинәнмәгән. Рух өсөн ислам диненең ул заманда тик шифалы ғына һут булыуын аңлап еткермәгән ул, төшөнә алмаған аҙағына тиклем. Бында христиан диненең тәьҫире, ғәйебе лә ифрат ҙур( башҡорттар ҙа, башҡа мосолмандар ҙа улар өсөн элек «инородцы», «нехристи», йәғни «түбәндәгеләр» булған, ә уларҙың динен бөтә дәүләт рәсми рәүештә, асыҡтан-асыҡ



05-2001.p65 190 30.07.01, 9:59

яҡлаған), еңел-елпе атеизм да быға үҙ өлөшөн индергән.

Шулай ҙа исламға тартылыу нигеҙендә башҡорттоң аң-зиһен ҡеүәһе лә, тормошсанлыҡ сәме лә арта барған. Үҙаң үҫә, күтәрелә барыу нигеҙендә халыҡта ғилемгә, камиллыҡҡа ынтылыш та көсәйә. Уға олпатлылыҡ өҫтәлә килгән; үҙенә баһа биреү, киләсәген күҙаллауға һәләттәре лә үҫешә барған ыңғайҙан үҙ дәрәжәһен дә һиҙә-күрә, киләсәге тураһында ла хәстәрләй башлай. Аң-зиһененә таянып! Башҡорттоң урыҫ дәүләтенә ҡушылыуы — быға асыҡ дәлил. Әлбиттә, был аҙымға уны «көнө» мәжбүр иткән, ә дине түгел. Шулай ҙа... «һаҡланғанды һаҡлармын» тигән ҡараш үткәрелә ислам тәғлимәтендә.

Был һуңғы аҙымынан һуң — урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан бирле — башҡорт йәнен-тәнен аямайынса сит дәүләттәргә ҡаршы бөтә алыштарҙа ла ҡатнашып килгән. Рәсәй мәнфәғәттәрен нығытыу өсөн. Ә үҙ милләте, халҡы мәнфәғәттәрендә ул нимә яулаһы, отто һуң? Был ҡан ҡойоуҙар, юғалтыуҙар нигеҙҙә урыҫтар һәм күрше ҡайһы бер милләттәр өсөн генә отошло булды. Тәүгеләренә даншөһрәт өҫтәлә килде, тегеләре һан яғынан өҫтөнлөк ала барҙы. Башҡорттоң эскерһеҙлеге, ихласлығы, элекке Рәсәй мәнфәғәттәре өсөн тырышлығы милли үҙаңда һуңлабыраҡ сағылыш алған. «...Ейәндәрем уҡыр бер ҡасан» тип уйланыу өсөн генә лә аңдың ифрат та юғары кимәлгә күтәрелгән булыуы мотлаҡ шарт бит.

Өҫтәүенә, башҡорт уйланыу-зарланыу менән генә сикләнмәгән! Ижтимағи тормоштоң ҡатмарлылығы, ҡырыҫлығы һәм ғәҙеллеккә өлгәшеү маҡсатында ынтылыштарҙың ҡаҡшауына аһ-зар ишетелһә лә, был моңланыуҙың төбөндә-нигеҙендә рухи сәләмәтлек, күркәмлек һәм оптимизм — изгелек, ғәҙеллек тантана итәсәгенә ышаныс ята. Һүҙ барған тәғлимәт тә һәр кешелә быҫҡыған, уға хас яҡтылыҡҡа өмөтөн ҡеүәтләй, дәртләндерә генә.

Оҙон көйлө боронғо башҡорт халыҡ йырындағы юғарылағы һүҙҙәр ифрат та юғары аң кимәле тураһында һөйләй. Ундай дәрәжәгә мәжүсилек осоронда аң-зиһен күтәрелә алмаған.

Күп, ифрат та күп булған ул башҡорттоң оҙон тарихында оҙон көйҙәргә һалынған аһ-зарлы уй-хәтирәләре. Милләт рухына борондан уҡ саялыҡ, үтә тәүәккәллек, һуңғы сиккә тиклем көрәшеү-ҡаршылашыу әүәҫлеге лә хас булған. Улар барыһы ла кешенең көслө эске, шәхси ғорурлығынан килә. Әммә ҡайһы ваҡыт «үҙ һүҙлелек» самаһын уҙып китә ҡалһа, маһайыуға ла яҡынлаша бит. Бик тә ҡамасаулаған был һыҙаттар милли үҙаң, милли рух үҫешенә. Мосолманлыҡ башҡорт рухының ҡыҙыулығын бер ни тиклем һүрәнләтеп, уны тотанаҡлыҡҡа табан йүнәлдергән. Ошо һыҙатҡа бәйле халыҡ рухының бөгөнгө хәле күптәрҙе төшөнкөлөккә этәрә, борсолоулы, хаталы уй-фекергә алып бара. Ысынында иһә, был — урынһыҙға тоҡанып, дөрләп янып китеүҙән тыйып, тотоп тороусы, ҡурсалаусы әҙәплелек ул.

Урғылып-ҡайнап торған хис-тойғоларын баҫа, тыя, йәшерә белергә лә өндәгән дин башҡорт рухын. Ҡайһы ваҡыт самаһыҙ хис-тойғоларына бирелеп китеүсән кеше тотанаҡһыҙлыҡ һаҙлығына килеп эләгеүсән була бит. Ошондай кәмселектәрҙән үҙен азат итеүгә лә өгөт-нәсихәт биреп килә ул ислам дине башҡорт рухына.

Юғарыла билдәләнеүенсә, башҡорттар дин мөхитендә мөкиббән бирелеп, иркенләп, рух «танһығы ҡангансы» йөҙөп йөрөүгә тиклем барып етмәгән. Был турала мәғлүмәттәр күп. Мәҫәлән, XIX быуатта йәшәгән урыҫ тарихсыһы, шулай уҡ яҙыусы һәм ауыл хужалығы белгесе В.М.Черемшанский (1821-1860) яҙмалары. «Дине буйынса башҡорттар — мосолман... Ләкин... уҙҙәренең дине менән бәйле тәғлимәттәрҙе үҙләштереп бөтөргә өлгөрмәгән; улар араһында ғәмәлдә мосолмандарҙа осрағанса үтә динселдәр юҡ, шуға ла Ҡөрьән ҡағиҙәләре улар тарафынан бигүк ҡәтғи үтәлмәй һәм уларға ыңғай йоғонто яһамай», — тип яҙған ул. Артабан автор ул ваҡыттағы башҡорттарҙы «үҙ алдына эш итергә ғәҙәтләнгән, үҙ өҫтөнән һис ниндәй хакимлыҡҡа түҙмәй» торған халыҡ, тип һүрәтләй.[5] Бында күпмелер дәрәжәлә хәл-торошто арттырып ебәреү ҙә барҙыр, бәлки. Шулай ҙа был фекерҙәрҙә, өлөшләтә генә булһа ла, дөрөҫлөк тә бар, әлбиттә.

Башҡорттар ислам диненә, ысынлап та, туғандаш татар халҡынан

айырмалы булараҡ, әллә ни ылыҡмаған — был бөгөн тарихи факт. Әммә ошо хәл башҡорт рухы, милли үҙаң, мәҙәниәт үҫешенә тик ыңғай ғына тәьҫир иткән, халыҡтың киләсәге мәнфәғәттәренә хеҙмәт иткән, тип оран һалыу урынлымы һуң? Юҡ, һис тә генә урынлы түгел. Ҡайһы бер милләт вәкилдәренең ошо фактты ғорурланыу өсөн нигеҙ итеп ҡулланыуы — был кешенең үҙ-үҙен яратыу сағылышы ғына, совет «һуғышсан атеизмы» мөхитендәге ялған ҡиммәттәргә ынтылыш. Ул ваҡыттағы ҡайһы бер ҡиммәттәр ялған, ҡайһылары яһалма ғына булған шул. Боронғо атай-олатайҙар ислам динен ҡабул иткән икән, бөгөнгө быуын кешеләренең бынан уңайһыҙланыуы — ул үҙе әҙәпһеҙлек.

Дин кешелектең аңы, рухи үҫешендә «әһәмиәтле» генә түгел, ә мотлаҡ бер баҫҡыс булып тора. Бер генә халыҡ та был «баҫҡыс» аша етеҙ һикереп кенә юғарыға үрмәләй алмаған — улар тарихта юҡ. Ниндәйҙер халыҡ ниндәй ҙә булһа дини тәғлимәт — мәҙәниәттең айырылғыһыҙ өлөшө булып торған дин — эсендә иркенләп йөҙөп, уның мөхитендәге һауа менән иркен тын алып үҫешмәгән икән, тимәк, был халыҡ үҙ рухы, мәҙәниәте өсөн ниндәйҙер ҡиммәттәрҙе үҙләштереүҙән мәхрүм булған. Ниндәй ҡиммәттәр һуң ул — былары әлегә аныҡ ҡына итеп асыҡланмаған. Фән киләсәктә уларын да аныҡлар, моғайын.

Күренекле инглиз-америкалы логик һәм философ, математик А.Н. Уайтхед (1861-1947) дингә ҡарата ошондай тәрән мәғәнәле фекер әйтеп ҡалдырған. «Рухтың Алланы ололауы — оҡшашы-тиңдәше булмаған көс артынан ҡыйыу осош ул, ә үҙенә именлек хәстәрләү — ҡайғыртыу түгел», — тиелә унда.[6] Ошо фекерҙе нигеҙҙә дөрөҫ тип ҡабул иткән осраҡта беҙ рухтың дингә тартылғандан һуң, бәлки, тағы ла иркенерәк, бейегерәк, ышаныслыраҡ, киңерәк ҡолас йәйеп, хәүефһеҙерәк оса алыу мөмкинлеген тоҫмалларға тейешле булабыҙ түгелме ни? Кире осраҡта иһә беҙ элekke, үҙенә генә ҡарап һоҡланып туя алмаған һәм шуға ла тоталитар рухлы примитив атеизм мөхитендә тоткҙонлоҡта ҡалып торорға риза булыуыбыҙҙы белдерәбеҙ. Был мөхиткә иһә дилетантлыҡ, еңел-елпе фекерләү алымы хас.

Тап ошо примитив атеизм, үҙендә тоталитар рух хакимлығын танырға теләмәгәнлектән ислам динен был тәғлимәткә «тоталитаризм хас» имеш, тигән ғәйеп ташларға маташа. Үҙендәге кәмселекте башҡа субъекттарға ла хас тип күрһәтергә маташыу алымы бөгөнгө психоанализда «проекция» механизмы тип атала. Икенсе төрлө әйткәндә, аҡ эт бәләһе ҡара эткә була инде.

Ғәмәлдәге сәйәсәт, ғөмүмән электән йәшәп килгән ижтимағи мөхит рәсәйҙәрҙең байтағын үҙ ауында тота, йәмғиәттә аңлы, дөрөҫ — цивилизациялы — ҡараш нығыныуына һәм өҫтөнлөк алыуына ҡамасаулай. Тап ошо маҡсатта юғары кимәлдә ойошторолған телевидение тапшырыуына яңыраҡ ҡына «Ислам ҡурҡынысы янаймы?» тигән исем бирелгәйне. Ошоноң менән йәмәғәтселек аңына ялған тойғо һалына: «телевидение дәүләт кимәлендә үк шулай тигән һорау ҡуя икән, тимәк, быға нигеҙ бар, күрәһең», — тигән уй тыуа күптәрҙә.

«Бог» менән «Алла» араһында айырма табып йәшәргә өйрәнгән кешеләрҙе бында айырма юҡлығына төшөндөрөүе ауыр. Тап шундайҙар ҡайһы мәл «ислам терроры» тигән төшөнсә ҡулланырға ла уңайһыҙланмай. Шул уҡ ваҡытта улар Рәсәй тарихында күҙәтелгән «аҡ террор» һәм оҙайлыраҡ дауам иткән «ҡыҙыл террор» булыуы тураһында ишеткәндәре лә юҡ. Һуңынан бер-нисә тиҫтә йыл буйы атеизм тоталитаризмы хөкөм һөрә. XII-XIII быуаттарҙа күҙәтелгән «крестовые походы» — былары «христиан терроры» була инде.

Бөгөнгө йәмғиәттә ыңғай күренештәр аша сәләмәт мөнәсәбәт, ҡараштар нығына килеүен дә танырға кәрәк. Бына, мәҫәлән, Мәскәү дәүләт университеты хәҙер хатта үҙе үк ислам дине буйынса белгестәр (уларҙы дини хеҙмәткәрҙәр менән бутарға ярамай) әҙерләй.[7] Кешелек цивилизацияһын ентекләберәк өйрәнеүгә яңы этәргес, тарихҡа һәм ғәмәлдәге ысынбарлыҡҡа дөрөҫ, фәнни ҡараш нығытыуға йүнәлтелгән ҙур аҙым был.

Халыҡтар, дәүләттәр, диндәр араһында бер-береһен аңлашырға һәм уртаҡ тел табырға берҙән-бер юл бар. Ул — асыҡ, ихтирамға ҡоролған диалогтар. Бындай алымдарҙан башҡа мәҙәниәтле донъяның киләсәген күҙ



05-2001.p65 192 30.07.01, 9:59

алдына килтереүе лә ҡыйын. Бөтә кешелектең һәм һәр аңлы, өлгөргән шәхестең именлек-тыныслыҡҡа ынтылышы киләсәккә ышанысты нығыта. Был дөйөм ҡиммәттәр мәҡәләбеҙҙә һүҙ барған тәғлимәттең нигеҙен тәшкил итә. Шуға күрә ташланған ғәйепләүҙәр уның рухына, асылына һис тә генә тап килмәй.

Мәҡәләбеҙҙең башында аталған автор иһә ысынында Рәсәйҙәге авторитар рухлы «классик атеизм» ҡанундарына йәбешеп ятҡанлығын күрһәтә. Был ҡанун-алымдың төп асылы ошо формулаға ҡайтып ҡала: имеш «дин — әфиүн ул». Шуға күрә ундай аң дин менән атеизм араһындағы мәсьәләне «яуызлыҡ—изгелек» төшөнсәләре күҙлеге аша ғына, ябайлаштырып — ҡапма-ҡаршы ҡуйып ҡарарға ғына күнегеп китә. Алдан уҡ яңылыш фекергә таяныу (урыҫса: установка, предубеждение) фәнни дөрөҫлөктө асыҡларға ҡамасаулай ғына. Тарихта иһә атеизм — изгелек, дин, киреһенсә, яуызлыҡ ғәмәлдәре менән генә «биҙәлмәгән»: ике тәғлимәткә лә күп төрлө ҡиммәттәр хас. Ысынбарлыҡтар даирәле фекерләүҙәрҙән күпкә ҡатмарлыраҡ.

Бөгөнгө башҡорт донъя, дөйөм кешелек мәҙәниәтендә үҙенең урыны, абруйы, дәрәжәһе тураһында уйланғанда, тик халҡының үткән тарихына һоҡланыу менән генә сикләнмәһен ине. Киңерәк даирәлә фекерләү мотлаҡ. Быуаттар артында ҡалған тарихта ғибрәт алып, аң-зиһенде уйландыра торған биттәр ҙә бар бит. Тап бына ошоларҙан милләттең киләсәге өсөн әһәмиәтле мәсьәләләр хасил була. Тәү сиратта ғәмһеҙлек менән битарафлыҡтан арынырға кәрәк. Башҡорттарҙың байтағы элек-электән үк «динем өсөн түгел, ә көнөм өсөн» тигән ҡараш менән йәшәргә мәжбүр ителгән. Милләт өсөн был тормош принцибы — ҡағиҙәһе бөгөн дә шундай уҡ әһәмиәтле. Киләсәктең «көнө» — ул иркенлек, муллыҡ, рухи сәләмәтлек.

Бихисап аяуһыҙ алыш-һуғыштарҙа ҡатнашып, гел генә ҙур юғалтыуҙар кисереп тә, тарихта юғалып ҡалмаған. Башҡалар тарафынан йотолмаҫ өсөн үҙендә ихтыяр көсө, аҡыл-зиһен ҡеүәһе лә таба алған элек башҡорт рухы... Бөгөн иһә ошо рух эскелеккә ҡаршы торорға һәм үҙен-үҙе кәмһетеүгә, артабан — бөтөрөүгә барыуҙан тыя алмаймы ни? Төшөнкөлөк тотҡононан ысҡынып, баҙар шарттарында ла йылдамлыҡ, әүҙемлек күрһәтеп йәшәргә уңайһыҙланамы әллә ул рух? Башҡа халыҡтар араһында үҙен улар менән тиң тойоп тотоп һәм элекке абруйын һаҡлап йәшәргә ояламы әллә бөгөн? Етерлек уның «быларға ғына» хәле! Ошо кәмселектәрҙән үҙен-үҙе азат иткән осраҡта ғына милли рух артабан да ысынбарлыҡта йәм һәм ғәм табып, илһамланып йәшәргә һәләтле икәнлеген иҫбатлар. Ошо нигеҙҙә генә башҡорт үҙ рухы асылының — азатлыҡҡа ынтылыштың — мәңгелек икәнлеген дә танырға мәжбүр итәсәк.

Ысынбарлыҡты сағылдырыусы төрлө өлкәләге күренештәргә, шулай уҡ үҙ ғәмәлдәреңә ҡарата ла дөрөҫ, ғәҙел баһа бирергә ынтылып йәшәү — бына ошо ул рухилыҡтың асылы. Киләсәктә башҡорттоң рухилыҡ даирәһе тағы ла киңерәк, тәрәнерәк булһын ине.

## ИҪКӘРМӘЛӘР

[1] Маркс К., Энгельс Ф. Соч. 2-е изд. Т.2, С.89. («Идея» неизменно посрамляла себя, как только она отделялась от интереса»)

[2] Культурология (Учебник для вузов). — М. — 1995. С.79-80.

[3] Шердаков В.Н. Материалы «Круглого стола». Культура. Нравственность. Религия//Вопросы философии 1989. №11. С. 34)

[4] «Досье». Приложение к «Литературной газете». №7. 1991.

[5] Баһуманова М. Черемшанский энциклопедияһы//»Башҡортостан». 1996. 18 декабря.

[6] Уайтхед А.Н. Религия и наука. В кн.: Заблуждающийся разум?: Многообразие вненаучного знания. Сб. ст. М., 1990. С. 461.

[7] «Ислам Минбәре» гәзите, 1995 йыл. ноябрь (№11).



05-2001.p65 193 30.07.01, 9:59